**БАЛЫҠСЫ БУЛ ТИ АЛЛАМ**

Балыҡсы бул ти Аллам,
Бирәм Мин Үҙем ярҙам
Балыҡ йөҙә диңгеҙҙә,
Гонаһлы ҡара Ерҙә.

Балыҡ тоторға өйрән.
Ауҙы һал һин бик тәрән.
Шунда буш булмаç ауың
Тотһаң ҡулда китабың.

Балыҡ булыр иманһыҙ
Алла күрә тәүфиҡһыҙ,
Гонаһлы Ерҙә бәндә.
Алла бар тип белмәһә.

Балыҡ тотам оçтарам
Өйрәт мине Һин Аллам
Күңелемә һалып ҡуй,
Бир һин миңә яҡты уй.

Балыҡтарҙы Үҙең ҡыу,
Эсерербеҙ Тере Һыу.
Һыуһаған, сарсағанға
Юл өйрәтәм Хоҙайға.

Балыҡсы пәйғәмбәрҙәр
Артыңдан йөрөгәндәр.
Өйрәттең ау һалырға,
Балыкты күп тоторға.

Аллам Һин Үҙең миндә,
Балыҡ тотабыҙ бергә.
Ҡармаҡлау үтте ваҡыт,
Ауға тотайыҡ балыҡ

Ҡайҙа балыҡ күберәк,
Һалам ауҙы тиҙерәк.
Ваҡыт бит үтеп бара,
Ғүмерем етмәç, ҡара.

Кеше ғүмере ҡыçҡа,
Ышанмайым һаулыҡҡа.
Ышанамын тик Һиңә,
Хоҙайым Тәғәләмә.

Бар тотолған балыҡтар,
Иманда үçә улар.
Таҙа һыуҙа йөҙәләр,
Һин барлығын beләләр.

Һаçыҡ һыуҙа йөҙгәндәр,
Бар араҡы эскәндәр.
Бысыраҡ һыу үлтерә,
Тамуҡ ҡа алып китә.

Был донъя ағыулы һыу,
Балыҡтарҙы ауға ҡыу.
Ишет Һин Хоҙайҡайым,
Һинһеҙ булдыра алмайым.

Алып сыҡ таҙа һыуға,
Тыуғандарҙың барында.
Иремде Һин ҡалдырма,
Булһын Һинең янында.

Диңгеҙ шаулай, ағыулы
Йота хәлһеҙ балыҡты.
Көндә улар үләләр,
Йәһәннәмгә китәләр.

Ағыу булды тәмәке,
Ауыҙ һүҙе әшәке.
Наркотик араҡыны,
Һыра һәм самагоны.

Ағыуланды был донья,
Азартлы уйындарға.
Фәхишәле ҡыҙҙарға,
Экстрасенс апайҙарға.

Күрәҙәсе күрәме?
Ниндәй һыуҙа йөҙгәнен?
Кино, гәзит, журналы.
Шәрә ҡыҙҙар торғаны.

Иблис бит ике мөгөҙ,
Хоҙайға тик йөҙөгөҙ.
«Ҡапҡаны» антеналар,
Өй һайын телевизор бар.

Ни күрһәтмәй экраны,
Йөҙҙөрә ул баланы.
Тарта гонаһ упҡыны,
Уның һәр бер каналы.

Таҙартып булмай һыуҙы,
Һөҙөп булмай ағыуҙы.
Күпме закон сығарҙы.
Хөкөмәттә арыны.

Талыу белмәй Хоҙайым,
Көн-төнөн мин һорайым.
Доғаларын ҡыламын.
Тағы бир Һин дарманың.

Ауҙы беҙ киң үрәйек,
Балыҡсы күбәйтәйек.
Иман һүҙен әйтәйек,
Тере һыу эсерәйек.

Үлеп бара балыҡтар,
Ағыулананалар улар.
Ғ әрип тыуа кәүҙәһе,
Зәғиф булмаһын йәне.

Килтерәйек иманға,
Ынйы сәсеп аңына.
Алла Һүҙе — ул алтын,
Бысыраҡ һыуҙа ялҡын.

Ҡояш ялҡынын күрер,
Балыҡтар үҙе килер.
Өҫкә табан йөҙөрҙәр,
Ҡанаттарын кирерҙәр.

Йәшәргә ынтылырҙар,
Иман һыуын ҡосорҙар.
Ғәфү ит — тип, һорарҙар,
Гонаһтарын ҡоҫорҙар.

Ғәфү итеү Хоҙайҙа,
Уның Изге Ҡанында.
Бирер һиңә Тере Һыу,
Ғайса Мәсих – Алла Ул.

Тәүбәгә кил, һин үле,
Йөҙәһең һин, гел кире.
Тәүбә һора Хоҙайҙан,
Килде бит ахры заман.

Терелерһең иманда,
Аҡланырһың Ҡанында,
Ҡаны Изге Ғайсаның.
Таҙарыр йөрәк , аңың.

Йөҙәрһең һин ыңғайға,
Таянырһың Хоҙайға.
Йәшәрһең һин иманда,
Аллаң булыр янында.

Амин!